## 18 –се практик эш

**Тема:** Тамырҙарым – Башҡортостанда. Мои в корни - в Башкортостане.
**Башҡарыласаҡ эш төрҙәре:** ҡылымдың үткән заманын барлыҡҡа килтереү буйынса практик биремдәр башҡарыу.
**Наименование работы:** выполнение практических заданий на образование прошедшего времени глагола.
**Маҡсат:** ҡылымдарҙы өйрәнеү, ата - әсә йорто, Тыуған ил тураһында әңгәмәләшеү буйынса күнекмәләр булдырыу.
**Цель:** формирование умений и навыков по изучению глаголов, чтению и переводу текстов о родном доме, Родине.
**Ваҡыт нормаһы:** 2 сәғәт.
**Әҙәбиәт:** 1.Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2015.

**Техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре:**

1.Эште инструкцион – технологик карта буйынса башҡарырға.
2.Эш урынын тәртиптә тоторға. 3.Кеҫә телефондарын һүндерергә.

**Инеш инструктаж (письменно)**

**1.Инфинитив** – основная форма глагола. Инфинитив соответствует неопределенной форме глагола в русском языке. Аффиксы инфинитива: - рға, - ргә, - ырға, - ергә, - орға, - өргә. Например, йыу**ырға -** мыть, эшл**әргә -** работать.

**Повелительное наклонение** совпадает с корнем(основой) глагола.

ашарға – кушать – аша
уҡырға – учиться – уҡы
эсергә – пить – эс
яҙырға – писать – яҙ
уйнарға – играть – уйна
китергә – уходить кит
ултырырға – сидеть – ултыр
ҡарарға – смотреть – ҡара
эшләргә –работать – эшлә
йоҡларға – спать – йоҡла
йәшәргә – жить – йәшә
тыңларға – слушать – тыңла
килергә – приходить – кил
яратырға – любить – ярат
ятырға – лежать – ят
алырға – взять - ал

**Эш башҡарыуҙың йөкмәткеһе һәм эҙмә – эҙлелеге**
**(Содержание и последовательность выполнения работы):**

**1-се бирем**. Тексты уҡығыҙ һәм тәржемә итегеҙ. (Прочитайте и переведите текст.): 56 – сы бит, 7 – се күнегеү.

Беҙҙең өй

Минең атай – әсәйем ауылда йәшәй. Элек улар бәләкәй өйҙә йәшәй ине. Хәҙер ҙур өй һалдылар. Өй бер нисә бүлмәнә. Унда зал, йоҡо бүлмәһе, аш бүлмәһе, ванна бүлмәһе, бәҙрәф, оҙон коридор бар.

Атайым өй янында гараж, аласыҡ эшләне, мунса, һарай төҙөнө.

Беҙҙең ҙур баҡса бар. Унда төрлө емеш – еләк ағастары үҫә. Алма, сейә, ҡурай еләге, слива, крыжовник, ҡарағаттың бер нисә төрө бар. Әсәйем ҡарағат ярата, ә мин алма яратам. Әсәйем уларҙан ҡайнатма эшләй.

Әсәйем – атайым йәшәгән ауыл район үҙәгенән алыҫ түгел. Унда автобус йөрөп тора. Билет хаҡы 30 һум.

| | |
|---|---|
| аласыҡ – летняя кухня | үҙәк - центр |
| ҡайнатма – варенье | алыҫ түгел - недалеко |

**2 –се бирем.** Бирелгән мәҡәлдәрҙе күсерегеҙ, уларҙың рус эквиваленттарын табығыҙ (Спишите данные пословицы о доброте, добром слове, найдите их русские эквиваленты):

Яҡшы һүҙ балдан татлы. Яҡшы атҡа ҡамсы кәрәкмәй. Ярлы кеше йомарт була. Йылы һүҙ таш иретә. Ике уйла, бер һөйлә. Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.

**3-сө бирем. Вариантлап эшләү.** Ҡылымдарҙы тәржемә итегеҙ, бойороҡ һөйкәлешендә ҡуйығыҙ. Например, торорға – вставать – тор – встань.

**1 – се вариант:**, бирергә, йүгерергә, уйларға, башларға, йоҡларға, эшләргә, китергә, уҡырға, эсергә;

**2 – се вариант:** йәшәргә, килергә, һикерергә, күсерергә, эшләргә, ашарға, аңларға, ҡайтырға, һөйләргә .

**4 – се бирем.** Карточка буйынса эш. Ҡылымды билдәһеҙ үткән заманда үҙгәртегеҙ ( проспрягайте глагол в прошедшем неопределенном времени).

**5 – се бирем.** Һүҙҙәргә синонимдар табығыҙ (Найдите к словам синонимы): яҡшы, матур, ҡарт, ҙур, насар, оҙон, бәләкәй, аҡыллы, егәрле, һыуыҡ.

**Практик биремдәрҙе башҡарғандан һуң студент (После выполнения заданий студент)**

**белергә тейеш (должен знать):** ҡылымдарҙы (глаголы);

**эшләй һәм ҡуллана белергә тейеш (должен уметь):** ҡылымдарҙы билдәле һәм билдәһеҙ үткән заманда ҡуйырға; текст уҡырға һәм диалог төҙөргә (образовать форму прошедшего определенного и неопределенного времени; читать тексты, составлять диалоги).

**Контроль һорауҙар һәм биремдәр (Контрольные вопросы и задания):**

1.Бирелгән ҡылымдарҙы бойороҡ һөйкәлешендә ҡуйығыҙ (поставьте глаголы в повелительном наклонении): кушать, жить, играть, сидеть, писать, учиться, думать, прийти, уйти, любить, спать, мыть.

2. Һорауҙарға яуап бирегеҙ (Ответьте на вопросы): 61– се бит, 20 –се күнегеү.

**Студенттарҙың үҙ аллы эше өсөн биремдәр (Задание для самостоятельной работы студентов):** Л1. 67 - 68 – се биттәр. Тыуған йорт тураһында текст төҙөргә (Л1. стр. 67 – 68). Составить текст о родном доме).

Уҡытыусы _______ Мөхәтдинова Ф.Р.